***Суфиян ПОВАРИСОВ,***
***Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы***

# Өс оло әҙиптең күңел донъяһына ҡыҫҡа сәйәхәт

*Һәр әҙәби әҫәр һүҙ-һүрәт, һүҙ-фекер, һүҙ-тойғо ҡәрҙәшлеге менән илаһи. Илаһилыҡ эстетик зауыҡ нигеҙендә ҡанатлана. Уның шулай икәнлеген әҙәбиәт йылы (2015) шауҡымы ла иҫбат итте. Шауҡымда әҙәбиәт һөйөүселәр ъәскәре ҡайнашты. Күп кенә йәш ҡәләм оҫталары Яҙыусылар берлегенә алынды. Аҡһаҡал яҙыусылар уларъа ярҙам итте. Тәжрибәле әҙиптәребеҙҙең ауылдарҙа осрашыуҙар үткәреп йөрөүҙәренә рәхмәт әйтергә кәрәк. Бай, матур, гүзәл, нәфис тәбиъәтле башҡорт еренең күп талантлар биреүе барыбыҙъа ла мәълүм. Киләсәктә лә шулай булһын! Әҙәби әҫәрҙең сәнъәтсә эшләнеше, эстетик зауыҡ серҙәре ниҙә? Был серҙәр шиъриәттә, прозала, драматургияла нисек асыла? М.Кәрим әҫәрҙәренең тәрән серҙәре ниҙә? З.Биишеваның баллы һүҙе сере? Н.Ғәйетбайҙың, мәҫәлән, мәънәләш һүҙҙәрҙе күп ҡулланыу сере ниҙә? Әҙәбиәт йылында ла әҫәрҙәрҙең сәнъәтсә эшләнешен яҡшыртыу тураһында күп төрлө фекерҙәр әйтелде. Әҙәби әҫәрҙәрҙең эстетик ҡиммәте хаҡында фекерләшеүҙе бер йыл менән сикләп булмай. Уны дауам итергә кәрәк. Хәйерлегә булһын!!!*

## Сәнғәтлелек сере

### Мостай Кәрим

Шиғриәттә сәнғәтлелекте асыҡлау еңел түгел. Унда, минеңсә, болондағы мең төрлө сәскәләр төҫө, уларҙа беҙгә күренмәгән илаһи эске йән, тереклек-серлелек, тышҡы балҡыш-матурлыҡ, мең-миллион ғазаптар аша тау күкрәген йыртып сыҡҡан шишмә моңо, уның наҙлы ҡыҙ йөрөшөн хәтерләтеп ағыуы, урман шауы, ундағы япраҡтарҙың серләшеүе, һандуғастар һайрашыуы, турғайҙар йыры, иген ҡырҙары, талғын ғына иҫкән елдә башаҡтар шыбырлашыуы, ғаләм киңлеге, бөтөн донъя һулышы һәм шағирҙың оло, ҡайнар йөрәгендәге хис-тойғо ташҡыны, күңел даирәһендәге уй-аҡыл-фекер ҡөҙрәте бар. Былар һәм шуларға оҡшаш биниһая күп төрлө әйбер, күренеш-ваҡиға, хәл-әхүәл, барлыҡ хаяти йәшәйеш бер бөтөн, илаһи шиғри-поэтик

йомаҡ тәшкил итә. Шағир, кеше күҙе күрмәҫ ерҙән ынйы эҙләп тапҡан мысыр күгәрсене кеүек, кеше күңеленән, барлыҡ есем-әйберҙәрҙән, донъя киңлегенән поэтик гәүһәр сүпләй. Улар халыҡ телендә, йырҙарҙа, мәҡәл-әйтемдәрҙә, әкиәт-риүәйәттәрҙә лә күп — шиғри ынйыны шағирға иң әүәл халыҡ үҙе бүләк итә. Шағир халыҡ ижад иткән поэтик ынйыларҙы тағы ла нығыраҡ иплəп-һиплəп, матурлап-матурлап, мәғәнәһен тәрәнәйтеп, уның үҙенә кире бирә. Ҙур шағир, аҙыҡ көтөп ауыҙын асып торған ҡош балаһылай, халыҡ ижад иткән поэтик табыштар менән генә ҡәнәғәтләнмәй. Ул әҫәргә идея эстәлеге, йән-ҡан, сәнғәтлелек өҫтәһә, халыҡ телендәге поэтик биҙәктәргә лә яңы төҫтәр өҫтәлә. Әгәр был да ҡәнәғәтләндермәһә, үҙе яңынан-яңыларҙы ижад итә. Бындай үҙенсәлек һүҙ сәнғәте оҫталарының тәүге әҫәрендә үк күҙәтелә. Мостай Кәримдең 1936 йылда яҙылған «Тулҡындар» шиғырына иғтибар итәйек.

Апрель кисе зәңгәр пәрҙә тарта... Иҙел битенә тән һыйына... Аҡһыл айҙың тоноҡ нурҙарынан тулҡындар көмөшләнә һәм улар һикерешеп уйнай башлай. Шағир — кәмәлә. Ул шаян тулҡындарға ғашиҡ. Ишкәксе дуҫы тиҙ арала яр менән араны йырағайта. Ә яҙғы Иҙел бөтөрөлөп аға ла аға. Тулҡындар кәмәгә үрмәләй... Был үҙенсә бер поэтик күренеш-манзара. Ни өсөн яҙа быны шағир? Ғәжәп бай, матур, хозур тәбиғәтле Башҡортостан еренең бер күренеше, миҙгеле менән уҡыусыны ләззәтләндерергә, сихырларға теләйме? Уныһы ла кәрәк. Тәбиғәт гүзәллеге күңелгә рухи байлыҡ, эстетик гүзәллек өҫтәй. Шулай ҙа шағирҙың әйтергә теләгәне ул ғына түгел. Уның мәғәнәһе тәрәнерәк. Ул йәшлек матурлығы тураһында йырлай:

Яҙғы Иҙел бөтөрөлөп аға,
Тулҡын кәмәбеҙгә үрелә,
Ҡанаттарын ҡаҡҡан шул тулҡындар
Йәшлегемдәй матур күренә.

Йәшлекте гөлгә, сәскәгә, таңға... тағы ла әллә нимәләргә тиңләйҙәр. Әммә халыҡ йырҙарында йәшлек күп осраҡта шуларҙың барыһынан да матурыраҡ итеп тасуирлана. Бер генә миҫал:

Йәш сағымда күкрәгемә
Сәскәләр ҡаҙаманым,
Сөнки йәшлегемдән матур
Сәскәләр таба алманым.

Был шиғырҙа ла шулай: йәшлек тулҡындар кеүек кенә матур түгел, ә киреһенсә... йәки йәшлек сағыштырғыһыҙ. Ул барыһынан да өҫтөн. Ә инде тулҡындарҙа йәшлек матурлығын күреү — эске поэтик көс күрһәткесе. Йәшлек — матурлыҡ ҡына түгел, ғәйрәт, көс, ғәййәрлек осоро ла. Был шиғырҙы шағир ун ете йәшендә яҙған. Йөрәктең тулҡынланған, ярһыған сағы. Унан һуң инде шағир тормош тулҡындары эсенә инеп китә. «Тулҡын» һүҙе Мостайҙың бик күп әҫәрҙәрендә поэтик символ булараҡ ҡулланыла. Уның эске мәғәнәһе әҫәрҙән әҫәргә тәрәнәйә бара. «Диңгеҙ ярында (Пушкин рәсеменә)» шиғырынан (1937) бер өҙөк:

Һул ҡулын ҡаҡ ҡая ташҡа терәп,
Тулҡындарға төбәп күҙҙәрен,
Әллә инде азатлыҡты шағир
Диңгеҙ дауылынан эҙләне.

Ғәлимйән Ибраһимов та «Яҙ башы» тигән беренсе хикәйәһендә «тулҡын» һүҙен тәбиғәт күренешен тасуирлау өсөн ҡуллана: «Ана йыраҡ тауҙар, урмандар, ана матур ғына тулҡынланып күренә торған ужым баҫыуы...» Ә инде артабанғы әҫәрҙәрендә тулҡын кешеләрҙең эске халәтен, рухи донъяһын, тормош-көнкүреште, ижтимағи-сәйәси хәлдәрҙе, революцион көрәште сағылдырыу өсөн ҡулланыла. «Беҙҙең көндәр» романынан бер миҫал: «Оло Рәсәй диңгеҙендә этәрелгән ҡеүәтле революция тулҡындары...»

Мостай Кәрим образлы сағыштырыуҙар менән айырыуса иркен, оҫта эш итә. Мәғлүм булыуынса, һәр милләттең үҙенә генә хас традицион сағыштырыуҙары була. Улар башҡорт телендә лә, татар телендә лә шаҡтай күп: арыҫландай егет, мамыҡтай ҡар, еләктәй ҡыҙ, талдай нескә бил һ.б. Сағыштырыуҙа, билдәле булыуынса, эске әйбер-күренеш бирелә. Шуның береһе — сағыштырылыусы (объект) тип йөрөтөлә. Субъекттың үҙенсәлекле билдәһен, аҫыл сифатын, эске һәм тышҡы күренешен асыҡлау өсөн объект табыу ситен. Бының өсөн күп эҙләнергә, әйберҙәрҙеге ғәжәп серле үҙенсәлектәрҙе күрә белергә кәрәк. М.Кәримдең «Туҡайға» (1938) шиғырынан миҫал килтерәйек:

Яҡты көнгә сығып етә алмай,
Күмелеп ҡалған шахтер шикелле,
Һөйгән монологын һөйләп бөтмәй,
Тынып ҡалған актер шикелле,
Ағыуланған тынсыу ҡараңғыла
Янып бөтмәй һүнгән шәм кеүек,
Сәхрәләге яҙғы йылға кеүек,
Ташты ла ул, тынды йәш егет,
Яҙғы ҡырау япраҡтарын бөргәс,
Күкрәгән дә шиңгән гөл кеүек,
Иҫкелектең тынсыу һауаһында
Тыны бөтөп үлде йәш егет...

Ғ.Туҡай тураһында татар, башҡорт шағирҙары күп шиғыр яҙҙы. Поэмалар ижад ителде. Уның эске донъяһы, кешелеклелек сифаттары, йәшәү рәүеше, инсаниәтлелек йөҙө төрлө-төрлө әйбер-күренештәр (объекттар) менән сағыштырылып асыҡланды. Ун туғыҙ йәшлек М.Кәримдең сағыштырыуҙары шуларҙың береһенә лә оҡшамаған. Шул осорҙағы тормошто шағир элекке ҡараңғы шахта менән сағыштыра. Мәғлүм булыуынса, шахта хужалары эшсене баҙ кеүек ҡараңғы, упҡындан тәрән, бына-бына емерелергә торған шахталарҙа эшләткән. Шахталар емерелеп, күптәр шунда харап булған. Туҡайҙы шулар менән сағыштырыу ғәйәт мәғәнәле. Беренсенән, шағир йәшәгән ауыр, ҡараңғы, ҡотһоҙ тормошто, икенсенән, шул ҡараңғылыҡта ыҙа сиккән Туҡайҙың үҙен күҙ алдына килтерәбеҙ.

Туҡай бик йәшләй мәрхүм була. Быны яратҡан монологын һөйләп бөтөрмәй тынған актер менән сағыштырыу ҙа күп нәмә тураһында һөйләй. Актер — нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы. Ул һәр һүҙҙең һәр ауазын еренә еткереп, эҫке мәғәнәһен асырлыҡ итеп, тамашасы күңеленә тамам һеңдерерлек дәрәжәлә һөйләй. Әйтәһе һүҙҙәрен әйтеп бөтөрә алмай сәхнә менән хушлашҡандары ла була. Туҡай — нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы. Актер халыҡ күңелен хистойғоларға бай, мәғәнәле һөйләше менән яулаһа, шағир был маҡсатҡа ҡәләм

оҫтаһы булараҡ ирешә. Беренсеһен — һандуғасҡа, икенсеһен рәссамға тиңләргә мөмкиндер. Бындайҙы фән телендә «индивидуаль сағыштырыу» тип йөрөтәләр. Халыҡ ижадында ул юҡ. Был — шағирҙың үҙ табышы. Оҙаҡ, етди уйланыу, һүҙ ҡатламдарын ҡат-ҡат аҡтарыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Ҡеше күҙе күрмәгән ынйыны эҙләп тапҡан мысыр күгәрсене кеүек.

Һүҙ сәнғәте оҫталары сағыштырыуҙы осор үҙенсәлегенә лә ҡарап төҙөй. Туҡай ғүмерен ағыулы, тынсыу ҡараңғылыҡта янып бөтмәй һүнгән шәмгә оҡшатыу ҙа быны раҫлап тора. Һеҙҙең күҙ алдына ҡараңғы баҙҙа һүнер-һүнмәҫ янып торған шәм килеп баҫа. Туҡай йәшәгән осор өсөн бик тәбиғи образ. Шәм, лампа һүҙҙәрен Туҡай үҙе лә йыш ҡуллана ине: «Мин яҙам, шунда күрәм: лампа эсендә май кәмей, алда ҡағыҙға ташыйҙар — күңелемә уйҙар һыймай...»

«Сәхрәләге яҙғы йылға кеүек, ташты ла ул, тынды йәш егет...» тигән сағыштырыуҙы Мостай Кәрим оҫта уйлап тапҡан. Туҡайҙың да шиғри ташҡыны шулай уҡ көслө, ярһыу, дауыллы-тулҡынлы. Йәш егеттең дә йөрәге шул сама тибә бит. Туҡай — поэзия ташҡыны араһындағы ярһыу йәш егет.

Туҡай ғүмере таңын — ғүмер яҙын күрҙе. Ғүмер уртаһы — ғүмер ҡояшы, йәшәү аҡшамы уға насип булманы. М.Кәримдең «Яҙғы ҡырау» һүҙ теҙмәһен ҡулланыу юкҡа ғына түгел. «Яҙғы ҡырау япраҡтарын бөргәс, ҡапыл ғына шиңгән гөл кеүек...» тигән сағыштырыу ҙа — М.Кәримдең ҙур табышы. Теоретиктар теле менән әйтһәк, индивидуаль сағыштырыу. Ул юғарылағы сағыштырыуҙарҙа бирелгән мәғәнәне, стилистик-экспрессив ҡеүәтте тағы ла көсәйтә төшә. Ә инде «Иҫкелектең тынсыу һауаһында Тыны бөтөп үлде йәш егет» тигәне иһә шуларҙың һәммәһен йомғаҡлап ҡуя.

М.Кәрим Туҡай йәшәгән осорҙо хәҙерге көн менән дә бик оҫта бәйләй:

Беҙ дауылдар булып, күгебеҙҙе
Ҡара болоттарҙан таҙарттыҡ,
Беҙ — икенсе Туфан,
Еребеҙҙе
Иҫкелектән йыуып яңырттыҡ.
Туҡай йыры беҙҙең менән килде,
Йыры ялҡын уның бөгөн дә,
Туҡай... ул бит беҙҙең яҡты йондоҙ
Поэзияның яңы күгендә.

Эйе, поэзияның яңы күгендә яҡты йондоҙ буласағын Туҡай үҙе лә һиҙгән! Ул Пушкин, Лермонтов һәм үҙенең поэзия күгендә өс йондоҙ булыуы тураһында яҙған ине. Оло шәхестәрҙе үҙе лә йондоҙ менән сағыштырып ҙурланы: «Көс менән бергә гүзәллекте йыйған диңгеҙ кеби ул ине, өҫтөн вә ҡул етмәҫ кеше, йондоҙ кеби» («Хөрмәтле Хәсән йәдкәре»).

Тәбиғәттә мең-миллион төрлө төҫтәр, төрлөлөк, серлелек, шиғриәтлелек. Борон-борон замандарҙа уҡ әҙәм балаһы ул серлелеккә уй-хисе, йөрәк тойғоһо, аң-аҡылы менән үтеп инергә тырышҡан, үҙ йөрәгенең тәбиғәт менән бәйле булыу хосусиәтен аңлаған. Йыр, әкиәт, риүәйәттәрҙә ул йәнһеҙ әйбер-күренештәрҙе лә йәнләндереп-һынландырып биргән: ел илай, диңгеҙ ыңғыраша, тауҙар серләшә, йондоҙҙар күҙ ҡыҫа, шишмәләр йырлай һ.б. Былар әҙәбиәт теорияһында һынландырыу тип атала. Мостай Кәрим ижадының

шишмә башында, башланғыс осоронда уҡ һүрәтләү-тасуирлау сараһының был төрөн бик уңышлы файҙалана. Өҫтән ҡарағанда, улар тышҡы матурлыҡ, нәфислек өсөн генә ҡулланылған кеүек. Ләкин һәр береһе тәрән мәғәнәгә эйә. «Тән тураһында уй» (1939) исемле шиғырын алайыҡ:

Ай йөҙтүбән ятып ерҙе күҙләй,
Урамдарға тынлыҡ тарала,
Тойғоларға тулы хоҡуҡ биреп,
Төн ҡарарға сыҡтым ҡалаға.

Шиғыр һынландырыу-йәнләндереү менән башлана. Айҙың йөҙтүбән ятыуы мөмкин түгел. Тимәк, йәнле әйберҙә (кешелә) булған сифат айға күсерелә. Ошо урында Таҡташтан бер миҫал килтерәйек: «Март айының нескә билле еле һуҙылып ятып ерҙән ҡар ашай».

М.Кәрим ни өсөн ҡала төнөн һүрәтләү маҡсатын ҡуйған? Баш ҡалабыҙ Өфөнөң төнгө сихри матурлығын һүрәтләү-тасуирлау йәһәтенән. Ул һынландырыу алымы менән алып барыла. Керпек асыр өсөн сирендәрҙең йоҡомһорап таң көтөүе, тирәктәрҙең ҡала тураһында хикәйәт һөйләүе, бында ҡасандыр ҡырағай дала булыуын әйтеүҙәре, Иҙелдең һыҡрап ағыуы, ҡайындарҙың ҡанат йәйеп шаулауы — шуларға оҡшаш тағы төрлө тасуирламалар уҡып ләззәтләнәһең. Ләкин шағир бөгөнгөгә ҡапма-ҡаршы (контраст) ҡуйып, ҡаланың элекке ауыр тормошон сағылдырырға ла онотмай:

Төн. Тынлыҡҡа һеңеп был урында
Монашкалар гимны һуҙылған,
Шундай төндө башҡорт арҡаһынан
Ҡамсы үрергә ҡайыш һуҙылған.

Өфө тарихын, уның фажиғәле үткәнен, бөгөнгө тормошон шағир ун строфала биреп бөтөрөүгә өлгәшә. Автор тәбиғәт эсендә йөҙә. Уның йөрәге ҡаланың матур бер төнө менән бәйле. Был шиғырҙа бер романға һыйырлыҡ аң-аҡыл, хис-тойғо бар. Өфөнөң иҫ киткес матурлығы, сихри йәме, гүзәллеге тураһында бик күп шиғырҙар яҙылды. Ләкин уларҙың күбеһе әлеге «матур», «гүзәл», «күркәм» кеүек поэтизмдар (матур яңғырашлы һүҙҙәр) ярҙамында ижад ителә. М.Кәримдә иһә һүрәтләү сараларының һәр береһе тиерлек индивидуаль — авторҙың үҙенеке. Таң матурлығын, мәҫәлән, төрлө һүрәтләү саралары менән тасуирлайҙар. М.Кәримдең был шиғырында ул ҡыҙыл диңгеҙ булып йәйелә:

Хәлһеҙләнеп йыраҡ йондоҙ һүнә.
Айҙан һуңғы нурҙар түгелә,
Ҡыҙыл диңгеҙ булып таң йәйелә
Республика һәм ҡала күгендә.

М.Кәрим — ҙур поэтик, фәлсәфәүи фекерҙәр ҡулланып яҙыусы шағир. Уны үҙ халҡы, ил, ватан яҙмышы борсой. Ил кендеге булған ата-әсәләр тураһында ла күп яҙҙы ул. Әммә һәр урында тиерлек ваҡиға-күренештәр, сәйәси-ижтимағи хәлдәр ҡысҡырып торған ҡоро һүҙҙәр — поэтизмдар менән түгел, ә индивидуаль поэтик саралар ярҙамында тасуирлана. «Тыуған ерҙә» (1939) шиғырынан бер миҫал.

Атай
Һаман ата арыҫлан ул,
Баҫҡан ерҙә ташты илата,

Әсәй
Әүәлгесә
Ҡайғыһын да,
Шатлығын да йәшкә сылата.

Көслө ирҙе арыҫлан менән сағыштырыу халыҡ телендә лә бар. Шуға күрә ул уҡыусыны әллә ни шаҡ ҡатыра алмай. Ә бына баҫҡан ерҙә ташты илатыу — был һынландырыу инде авторҙың үҙенеке. Бер һынландырыу (ташты илатыу) ярҙамында шағир ана ниндәй поэтик көскә эйә була.

Миҫалдар Мостай Кәримдең Башҡортостан «Китап» нәшриәте тарафынан 1970 йылда татарса баҫылып сыҡҡан йыйынтығынан алынды. Уға баш һүҙҙе Ғайса Хөсәйенов яҙған. Ул «Һоҡланғыс поэзия иле» тип атала. Бына шунан бер өҙөк: «Мостай Кәрим поэзияһы — башҡорт сәсәндәренең ҡобайырҙарына, йырҙарына, дастандарына хас булғанса, тәрән мәғәнәле халыҡсан фәлсәфәгә ғәжәп бай, оло тойғоло ижад. Уның иң яҡшы шиғырҙарының һәм поэмаларының тамырҙары, сығанағы бейек тауҙарҙа баш алған саф һыулы шишмәләр шикелле, башҡорт халыҡ поэзияһына барып тоташа. Халыҡ поэзияһы шишмәһе уның ижадын иң аҫыл сифаттар менән һуғарһа, шағир уларҙы үҙ күңеле аша үткәреп, тағы ла байытып, яңынан халыҡтың үҙенә ҡайтарып бирә, уның күңелен, эстетик зауыҡтарын нәфисләй».

Күпме генә фекер йөрөтмәйек, бәхәсләшмәйек, әҫәрҙәрҙең сәнғәтлелек дәрәжәһе тәү сиратта һүҙ-тел сәнғәтлелегенә бәйле. Яҙыусы, шағир һүҙҙең йәмен-тәмен, матурлығын, нәфислеген, ҡайһы урында ҡулланырға кәрәклеген, эске мәғәнәһен, эстетик ҡиммәтен, серле яҡтарын аңлап эш итергә тейеш.

Мостай Кәримде Туҡайҙан, Таҡташтан өйрәнмәгәндер, тип әйтеү ҡыйын, уларҙа хатта бер-береһенә оҡшаш һүрәтләү саралары ла осрай. Туҡайҙа: «Аҡ күмәс менән ашарлыҡ саф һауа». М.Кәримдә: «Ҡымыҙ кеүек тәмле һауа...» («Яҙғы тауыштар»). Таҡташта: «...Ахыры, мәңге онота алмамын уҫаҡ япраҡтары шаулауын». М.Кәримдә: «Ҡаршымда уҫаҡ япраҡтары талғын ғына саба ҡул»...

М.Кәримдә миллилек тә, һәр нәмәгә үҙенсә килеү сифаты ла көслө. Башҡорт ҡымыҙы бөтөн донъяға билдәле, һауа ла дауа, ҡымыҙы ла. Шуға күрә шағирҙың Башҡортостан һауаһын ҡымыҙ менән сағыштырыуы бик тә тәбиғи, уҫаҡ япраҡтарының тәбиғәт хозурлығына ҡул сабыуы ла ышандыра.

Мәҡәләләге миҫалдар шағирҙың башланғыс ижад осоронан алынды. Һуғыш осоро поэзияһы, унан һуңғылары бөтөнләй индерелмәне. Мин бының менән М.Кәримдең ижад таңында уҡ һүҙгә һәм уның аҫыл сифатына, серле-тылсымлы көсөнә, сәнғәтлелек дәрәжәһенә нисек етди иғтибар итеүен күрһәтергә тырыштым. Шишмәнең башы ниндәй, һыуҙың ағышы шундай, тиҙәр. Саф, көслө, ғәйрәтле поэтик шишмә оло поэзия диңгеҙенә, күсмә мәғәнәлә әйтһәк, киң, тәрән, тулы һыулы йылға булып ҡушыла. Ә инде сәнғәтлелектең сере — поэтик тел менән фекерләүҙең берҙәмлегендә.

## Башҡорттоң баллы һүҙе

### Зәйнәб Биишева

Яҙма әҙәби тел барлыҡҡа килгәнсе үк әле төрки телдә һөйләшкән бик боронғо ҡәүемдәр, әйтелгәнсә, «тел ярышы» мәжлесе үткәрә торған булғандар. Әйтәйек, бер мәүзуғ (тема) буйынса күптәр һөйләй. Телмәр матур ҙа, мәғәнәле лә, сәнғәтле лә булһын. Кешенең аң-аҡыл алтыны, хис-тойғо көмөшө, эске донъяһы, фекер йөрөтөү ҡеүәте, рухи йөҙө, йөрәк ялҡыны көсө, күңел шәфәғәтлелеге шунда асыҡлана. Әлбиттә, әҙәм балаһын ваҡыт-ваҡыт һандуғас итә торған моң да ҡатнаша. Тамырҙаш, ҡәрҙәш, фекерҙәш, арҡадаш булмаған телдәрҙә лә моң уртаҡлығы бар. Был хосусиәт күрше булып йәшәгән боронғо чиндар (хәҙерге ҡытайлылар) менән төрки телдә һөйләшкән һундарҙа (гунн халҡы) ла күҙәтелә. Уларға корея халҡы моңо ла килеп ҡушыла, бер ни ҡәҙәр япондыҡы ла. Башҡорттоң баллы һүҙе солоҡсолоҡ менән бәйлелер. Был бәйлелек ап-аҡ һөт төҫлө Ағиҙел һыуы, иркә ҡыҙҙай йылмайып аҡҡан Дим йылғаһы, ярһыу йөрәкле егеттәй шашып йүгергән Солмандай, мәғрүр Урал тауҙары, сәскәле болондар, сихырлы, серле урмандар, бай, матур, гүзәл, нәфис тәбиғәтле бөтә Башҡортостан тәбиғәте моңо менән нағышлылыр. Шулай булмаһа, Зәйнәб Биишева «Башҡорт теле» тигән шундай илаһи шиғыр яҙа алмаҫ ине, моғайын:

Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин.
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин, —
Эй илһамлы, эй хөрмәтле башҡорт теле.

Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,
Серле ҡамыш ҡурайыңдан ҡарт, олпат һин,
Күпте күргән сәсәнеңдәй йор, зирәк һин, —
Эй һөйөклө, эй ҡәҙерле башҡорт теле.

Океандарға тиңләмәйем — тәрәнһең һин,
Айға-көнгә тиңләмәйем — гүзәлһең һин.
Ҡаяларға тиңләмәйем — ғорурһың һин, —
Эй хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле.

Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,
Күп быуаттар һин йырланың көрәш юлын,
Инде азат, йырлайһың һин еңеү йырын, —
Эй бәхетле, эй ҡәҙерле башҡорт теле.

Иң тәү миңә һин күрһәттең дуҫлыҡ юлын,
Минең өсөн һин бит йәшәү — бәхет үҙең,
Мәңге йәшә, эй һөйөклө башҡорт теле, —
Атам теле, әсәм теле — минең телем!

Бындағы нәфис һүҙ-һүрәт, һүҙ-фекер, һүҙ-тойғо булып ҡалырҙай тел берәмектәре халыҡтың әлеге «тел ярышы», «тел мәжлесе», «тел йыйыны», «тел туйы»нда әйткән алтындай ҡиммәтле һүҙҙәрҙе үҙҙәренең шиғыр ҡалыбына һалған һәм улар:

Тел тигән тәрән даръя бар,
Төбөндә ынйы-мәрйен бар;
Теләгәндәр һурып алыр,
Теләмәгән ҡоро ҡалыр, —

тигәндәге кеүек ижади илаһиәт менән бәйле. Күп йылға, күл-даръяларҙың һайыҡҡанлығы, бәғзеләренең ҡороғанлығы — күҙ алдыбыҙҙа. Шуға күрәлер, бәлки, Зәйнәб Биишева телдең океандан да тәрәнерәк булыуы тураһында әйтәлер, һүҙҙәрҙең алтыны, ынйыһы, мәрйене өҫтә генә түгел, океан төбөндә лә. Аяуһыҙ ҡоролоҡта йәшеллек көйгән һымаҡ, тел океаны төбөндәге һүҙ гәүһәре харап булмай. Һүҙ хазинаһынан мәхрүм ҡалмаҫ өсөн иренмәҫкә, ялҡау булмаҫҡа, шул океан төбөнә даими сумып торорға кәрәк. Унда ҡоролоҡ булмаһа ла, һүҙҙәрҙе беҙҙең күҙҙәрҙән ҡаплай торған ләпәшкә, ҡом-таш бар. ЮНЕСКО, ана, донъялағы күп телдәрҙең бөтөргә йөҙ тотоуы тураһында әйтә. Тимәк, ил өсөн ҡанлы көрәш даими булып торған кеүек, тел өлкәһендә лә айбарлы ижтиһад мотлаҡ.

Башҡорт теленең байлығын, нәфислеген, моңон, илаһилығын аңлап яҙҙы Зәйнәб Биишева. «Тел — күңел көҙгөһө», «Тел — милләт көҙгөһө», «Тел — ил көҙгөһө» тибеҙ. Теле барҙың — иле бар. Теле юҡтың — иле юҡ. Зәйнәб Биишеваның тел бөйөклөгөн танып-белеүгә мул ярҙам итеүсе сағыштырыуҙар (моң шишмәһе һандуғастай, һығылма бил тал сыбыҡтай, аллы-гөллө гөлсәскәләй, күгәреп ятҡан Уралдай, серле ҡамыш ҡурайҙай, күпте күргән сәсәндәй), тел-биҙәк сараһы булған эпитеттар (нәфис, наҙлы, бай, йомарт, серле, олпат, йор, зирәк, һөйөклө, ҡәҙерле, гүзәл, ғорур, хикмәтле, мәрхәмәтле) менән ҙурлауы уның Ватанын йөрәк ҡайнарлығы, күңел ялҡыны, аң-аҡыл, хис-тойғо менән яратыусы илһөйәр (патриот), эстетик идеаллы тәрбиәсе, педагог-психолог икәнлеген күрһәтте. Шағирә өсөн тел аралашыу, фекер алышыу ҡоралы ғына түгел, йәшәү бәхете сығанағы ла. Башҡорт ере — бал иле. Башҡорт ере — һандуғастар иле. Башҡорт ере — тәбиғәт ҡото иле. Ырыу-ҡәбилә, аймаҡ-ара атамаларына ҡағылышлы риүәйәт-легендалар «Башҡорт халыҡ ижады» китабында ла (Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980 йыл) шаҡтай: «Башҡорт» һүҙе ҡайҙан килеп сыҡҡан? (63-се бит); «Башҡорт» һүҙе нисек килеп сыҡҡан? (64-се бит); Башҡорттар ҡайҙан килгән? (65-се бит); Башҡорттарҙың килеп сығышы (66-сы бит); Башҡорт тарихы (68-се бит); Ҡыпсаҡтар (72-се бит); Болғарҙар менән башҡорттар (149-сы бит); Ҡаһым түрә (226-сы бит) һ.б. Ҡыҫҡаһы, хәҙерге башҡорттоң заңы алыҫ, сал тарихта ялҡынланған. Был ялҡын уның телен хәҙер ҙә балҡытып тора. Был телдең олпат тип аталыуы күңелебеҙҙе тарихтың әлегә беҙ белеп бөтөрмәгән хазиналарына сәйәхәт иттерергә ҡуша. Ҡәләм оҫтаһының шиғырҙағы «Ай-көн» тигән парлы һүҙе әҙәм балаһының Ер һәм Күк мөхәббәте емеше икәнлеген аңлатып тора. «Аллы-гөллө гөл-сәскә» тигән парлы һүҙҙәр Ерҙең матурлыҡҡа төрөнөү сифатына шаһит. Зәйнәб Биишевалағы бай, матур, гүзәл телдең мәңгелеге — Ноғман Мусиндағы бай, матур, гүзәл урмандың мәңгелеге менән ҡәрҙәш. Патриотизмдың эстетик тойғолар һауаһы менән шифаланыуы һәр беребеҙгә мәғлүм. «Патриотик тәрбиә», «эстетик тәрбиә», «хеҙмәт тәрбиәһе», «тел тәрбиәһе» төшөнсәләре айырым-айырым ҡаралһа ла, кешелеклелек тойғолары уларҙы бер аң-аҡыл ҡыҫаһына кәрәҙләп бәлзәмләй. «Башҡорт теле» шиғырында ла шулай бит. Милләт яҙмышы өсөн көрәш (патриотизм), матурлыҡ, нәфислек, гүзәллек (эстетика), һүҙ алтынын тел даръяһы, тел диңгеҙе, тел асҡысы төбөнән эҙләү (хеҙмәт), һүҙҙең йөрәк алҡындарын ҡайнатыуы (тел

тәрбиәһе) — шағирәнең илаһи идеалдары синтезы. Ахыр сиктә ул айырым кеше бәхете, милләт бәхете, ил бәхете, донъя, ғаләм бәхете менән мөһөрләнә. Бындай үҙенсәлек күптән үткән заман заңында ла, хәҙерге йәшәйеш тулҡындарында ла бар. Хәҙерге тормош тулҡынында оҫта йөҙөү өсөн уның ниндәйерәк йылғаларҙан хасил булғанлығын аңлау мотлаҡ. Шуларҙан сығып, киләсәктә бәхет ҡояшының ни дәрәжәләрәк ҡыҙҙырасағын самалап була. Әүлиәлекме был? Шулай ҙа булһын, ти. Әүлиәлек бар ул нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы Зәйнәб Биишевала. Бындай үҙенсәлек лексик-семантик нигеҙле (исем, сифат, һан, рәүеш, ҡылым) һүҙҙәрҙең тура һәм күсерелмә (метафорик) мәғәнәлә ҡулланыу хосусиәтендә барлыҡҡа килә. Һүҙҙәрҙең эске алтынын, тышҡы көмөшөн аңлап ҡуллана ҡәләм оҫтаһы. Заманалар ағышы грамматика фәнендә лә өйрәнелә (үткән заман, хәҙерге заман, киләсәк заман). Уларҙың һәр береһен тамғалай торған грамматик саралар ҙа бар. Яҙыусы өсөн быларҙы ла ныҡ белеү шарт. Уларҙы һанға һуҡмау — ата-әсәһен яратмаған бала менән бер. Заманалар тулҡынында оҫта йөҙә белеү эпик киңлек донъяһына ла юл аса. Ошо юлда баһадирҙай баҫып йөрөй шағирә. Уның шулай икәнлеген шиғриәтендә күрҙек. Хәҙер сәсмә әҫәрҙәр теленә лә иғтибар итәйек.

Әҙибәнең хикәйә, повесть, романдарында ла туған тел хазинаһындағы һүрәтләү-тасуирлау саралары тышҡы биҙәк, матурлыҡ, нәфислек өсөн генә түгел (былары ла кәрәк). Аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатыу, йәнле картина тыуҙырыу, образлылыҡ, идеялылыҡ, эмоциональлек, әҙәби әҫәрҙең йөкмәткеһен асыҡлау, заман рухына бәйләп ҡарау, персонаждарҙың ҡылыҡ-фиғелен билдәләү, эске донъяһына үтеп инеү прозала мөһим. Шуның менән бергә, әйтелгәнсә, ул сарала заманалар донъяһына күпер һалыу хәсиәтен дә үтәй. Поэзия менән проза өсөн тәғәйенләп ҡуйылған махсус тел биҙәктәре юҡ, әлбиттә. Бер үк һүҙ төрлө жанрҙағы лексик берәмектең эске һәм тышҡы сифатын сағылдырыу өсөн файҙаланыла ала. Сөнки әҙәби әҫәр үҙәгендә — кеше образы. Күбәләк, сәскә йәме, ҡурай моңо... — бөтәһе лә кеше рухиәтендәге даһилыҡ балҡышы. «Күбәләктәр һылыу, сәскә йәмле, уларҙан да ҡыҙҙар матурҙар. Егеттәре, ә һуң егеттәре, ай-һай, шаян, ай-һай, батырҙар. Йыйын күрке булып, ғорур йөрөй аҡ һаҡаллы олпат ҡарттары, ә һуң әбейҙәре ниндәй көләс, ниндәй татыу, тап бал ҡорттары».

«Матурлыҡ эсендәге батырлыҡ» тип әйтәбеҙ. Икенсе төрлөһө лә бар: «Батырлыҡ эсендәге матурлыҡ». Уның шулай икәнлеген ошо өҙөк тә иҫбат итеп тора. Матур ҡыҙҙар араһында батыр егеттәр, ғорур атлап йөрөүсе аҡ һаҡаллы олпат ҡарттар...» Ошо бәләкәй генә өҙөктә лә әҙибә теленең үҙенсәлекле яҡтары күҙгә ташлана. Үрҙә грамматика фәне телгә алынғайны. Һалдаттар сафҡа буйына ҡарап теҙелгәндәй, һүҙҙәр ҙә һөйләмдә грамматик ҡағиҙә ҡушҡанса урынлаштырылырға тейеш. Әйтәйек, сифат (эпитет) исемде асыҡлай. Шуға күрә уның урыны — исем алдында. Мәгәр стиль талап итһә, халыҡ аҡылы йыш ҡына батша фарманы менән ризалашмағандай, һүҙҙәр һөйләмдә үҙенә яйлыраҡ урын һайлай. Был өҙөктәге эпитеттар ҙа шулай. Хужаһы ауыҙлығын ныҡ тартмаған аттың бушанып китеүе һымағыраҡ. Икенсе төрлө әйтһәк — ирекләрәк. Был иреклелек тексҡа халыҡсанлыҡ рухын йәйә. Аҡ һаҡаллы олпат ҡарттарҙың, көләс әбейҙәрҙең матур һәм батыр ҡыҙ, егеттәр араһында йөрөүе — тормош йәменә йәнә нур һипкәндәй. Ә бит, ысынлап та, башҡорт ҡарттары шундай күтәренке рух менән йәшәргә ярата. Әбейҙәрҙе бал ҡорто менән сағыштырыу

башҡа милләттә юҡ. Уның булыуы мөмкин дә түгел. Мәҡәләмде «Башҡорттоң баллы һүҙе» тип атауым да — шул хаҡта уйланыу һөҙөмтәһе. Башҡорт балы бөтә донъя киңлектәрендә дан ҡаҙанды. Башҡорт балы Америка халҡына ла таныш хәҙер.

Һуңғы ваҡытта шәжәрәгә иғтибар ныҡ артты. Нәҫелеңде белергә тырышыу ғәҙәте беҙҙең халыҡта әүәл-әүәлдән килә. Уның шулай икәнлеген Зәйнәб Биишева «боронғолар» һүҙен ҡулланып та аңлата. Боронғолар фекеренән сығып, киләсәкте билдәләүсе әүлиә, остаз булып та китә: «...Ә үҙе харап матур ҡыҙ булмаҡсы был Гөлйемеш... Ул бөгөлөп торған оҙон ҡара керпектәр тиһеңме, түмтүңәрәк, һөрмәле ҡара күҙҙәр тиһеңме... Уның, Гөлйемеште әйтәм, донъяһының әсе-сөсөһөнә бирешмәй, өнһөҙ-һүҙһеҙ ҡаршы торған кеше балаһы икәнлеге әле үк күренеп тора. Ул инде, Хоҙай ҡушып, үҫеп алһа, һөйләп тормаҫ, эшләр... Собханалла, килмәгән бер ере юҡ балаҡайҙың!.. Хоҙай биргәс бирә икән бәндәһенә».

Һис көсәнмәйенсә, ябай ғына әйтелә. Мәгәр был ябайлыҡта матурлыҡ та, гүзәллек тә, нәфислек тә бар. Бөйөк яҙыусы Ғәлимйән Ибраһимов фекер тураһында һөйләп тормаҫҡа, уны аҙ һүҙ менән генә аңлатып бирергә ҡушҡайны. Был хаҡта нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы Зәйнәб апай үҙе лә әйтә торғайны. «Мин хәл-ваҡиға тураһында яҙам, әммә фекерҙәремде ярып һалмайым, улар һүҙҙәр эсенә йәшеренгән, зирәк уҡыусы үҙе тапмайынса ҡалмай уны», — тигәйне бер әңгәмәлә. Тимәк, уҡыусы өсөн китап эстетик ҡиммәт кенә түгел, уҡытыусы-педагог та, тәрбиәсе лә. Үҙенең ысынлап та халыҡ яҙыусыһы икәнлеген иҫбат итте Зәйнәб апай! Оло йөрәгенән башҡорттоң баллы һүҙен сығара белде ул.

Һүҙ-биҙәгес йәки эпитеттар ярҙамында әҙибә ил ныҡлығын бына нисек аңлата: «Һин хәҙер был илдең иң көслө, батыр егете», «Донъяла иң оло, иң хөрмәтле һәм мәңге йәш һөнәр — игенсе». Өс йәшлек сағында Зәйнәбтең әсәһе, ун бер йәшенә еткәндә атаһы гүр эйәһе була. Тормош дилбегәһен уға сабый саҡта уҡ ныҡ тоторға тура килә. Дүрт йыллыҡ башланғыс мәктәпте бер йылда тамамлап, бөтә уҡытыусыларҙы, ауыл халҡын шаҡ ҡатыра бәләкәй ҡыҙ. Әйтерһең, уның ҡолағына үҙе кеүек үк батыр, иманлы йөрәкле фәрештә дүрт йыллыҡ белемде әйткән дә торған. Мөғжизә был! Инглиз телендәге эпитеттарҙың стилистик үҙенсәлеге тураһында бер ханым кандидатлыҡ диссертацияһы яҙғайны. Рус филологтары эпитеттар һүҙлеген төҙөп баҫтырҙы. Ҡитап — кирбес ҡалынлығы. Башҡорт теле эпитеттарға айырыуса бай. Был байлыҡ Зәйнәб апай әҫәрҙәре туҡымаһына мөбәрәк тәсбих төймәләре булып теҙелгән. Гёте фаразлауынса, Европа яҙыусыһы биш-алты сит тел белергә тейеш. Шулай булмаһа, ул үҙ теленең байлығын аңлай алмай. Башҡорт теле — бай тел. Уның байлығын башҡа телдәр менән сағыштырып ҡарағанмы икән Зәйнәб апай? Әллә уға әлеге әүлиәлек ярҙам иткәнме?

Башҡортостандың бай, матур, гүзәл тәбиғәте, унда йәшәгән киң күңелле, батыр йөрәкле, иманлы кешеләрҙең рухиәте көтөлмәгән сағыштырыуҙар яһауҙа ҙур ярҙам итә. Уның шулай икәнлеген Зәйнәб апай әҫәрҙәре буйынса ла беләбеҙ. «Сабыр» һүҙе менән, мәҫәлән, башҡорттарҙа: «Сабыр иткән — мораҙына еткән», «Сабырлыҡтың төбө — һары алтын», «Сабырһыҙ кеше — самаһыҙ кеше» тигән ғибәрәләр яһалған. Ул ғибәрәләр боронғонан килә. «Ҡиссаи-Йософ»тан (VIII быуат) бер миҫал:

Сабыр берлә эшләгел ошбу эши,
Сабыр берлә эшләнер эшлә башы;
Морадына тиҙ йитәр сабырлы кеше,
Бу эш эчрә күрекле сабыр ҡылғыл имди.

Зәйнәб Биишевала: «Минең көрән бейә үҙемә оҡшаған, түҙем, сабыр». «Хужаһына оҡшамаһа, мал харам булыр» тип тә әйтәләр. Ғөмүмән, ысынлап та, хужа холҡо малға күсмәйенсә ҡалмай бит ул. Йәки киреһенсә: мал холҡондағы ҡылыҡ-фиғелде хужа кеше үҙенә ала. Йәшәйештең үҙенсә бер мөғжизәле сере был. Ошо серҙе ябай ғына һүҙҙәр менән әйтә лә бирә әҙибә. Был ябайлыҡта ҙур мөхәббәт заңы бар. «Тап теге элекке еҫле һабын ҡағыҙындағы «Гөлйыһан» кеүек һылыу» тигән сағыштырыу ҙа халыҡта юҡ. Шундай һабын революцияға тиклем Ҡазанда сығарылғаны тураһында ишеткән бар ине, күргәнем булманы. Һәр хәлдә, был да яҙыусының көтөлмәгән сағыштырыуы. «Һай-й, яңы һауған һөт һымаҡ бит үҙебеҙҙең Оло Әйек һыуы» тигән сағыштырыуҙа ла кеше менән тәбиғәт араһында булған оло мөхәббәт хис-тойғоһо сағылдырыла. Кешеләрҙе бер-береһе менән сағыштырып танып-белеүҙә милли ғорурлыҡ та көсәйә: «Һин, апай, төҫөң менән бөрйән башҡортона — атайыма оҡшағанһың, матур булғанһың. Ул да бит шулай ҡырлы танаулы, аҡ йөҙлө, һөрмәле сөм ҡара күҙле, оҙон керпекле ине!..»

Өйҙөң йәмен дә кеше менән сағыштырыу ярҙамында күрһәтә әҙибә: «Ҡәҙерен белһәң, өйҙөң йәме бит ул Ғәлимәкәй кеүек теремек әбейҙәр». Башҡорттоң батыр ирҙәрен Салауат менән сағыштырыу айбарлыҡ илаһиәтен көсәйтә: «Әйе, Муса Мортазинды әйтәләр, бәһлеүән кеүек ҙур кәүҙәле, ҡарлуғас күҙле, йәп-йәш матур егет икән. Икенсе Салауат батыр булған да ҡуйған, ти. Ҡурҡыу, сигенеүҙе белмәй, ти ул. Салауат шикелле йырсы ла, ҡурайсы ла, етмәһә, ти. Һуғышҡа ла иң алдан инә, ти...»

Бер төркөм халыҡты картиналағылай күрһәтеү өсөн прозала күп һүрәтләү-тасуирлау саралары ҡулланырға кәрәк. Телгә оҫта әҙибә был осраҡта ла аҙ һүҙ менән күп мәғәнә биреү маһирлығына ирешә. Бының өсөн әҙибә метафораларға иғтибар итә. Бер миҫал: «Дуҫтарымдың күҙе йондоҙ, биттәрендә көн уйнай». Ҡыҫҡалыҡта — оҫталыҡ, тип тә әйтәбеҙ. Был метафорик ҡыҫҡалыҡтың классик өлгөһө. Башҡорт ҡыҙҙарының күҙҙәре ысынлап та яҡты йондоҙ балҡыуын хәтерләтә. «Биттәрендә көн уйнай» тип әйтеүҙә уларҙың асыҡ йөҙлө, шаян тәбиғәтле, күркәм сифатлы булыуҙары ғына түгел, шәфҡәтле, шәфәғәтле, мөрәүәтле, ғиззәтле икәнлектәре лә сағыла. Метафора сағыштырыу ҡатнашлығында ҡулланылһа, был үҙенсәлектең өслүби (стилистик) ҡеүәте тағы ла юғарыраҡ дәрәжәлә була: «Һин мөғжизә булдың: күкте ярып үткән йәшен шикелле, балҡып уҙҙың», һүҙ-һүрәт (образлылыҡ), һүҙ-фекер (идеялылыҡ), һүҙ-тойғо (эмоциялылыҡ) халыҡта күпертелеп тә әйтелеүсән. Фәндә ул гипербола тип атала. Был ысулға ла етди иғтибар итә Зәйнәб Биишева: «Айһылыу еңгә шәфҡәт фәрештәһе лә баһа!» «Ҡайһылай һәйбәт итеп ситләтеп тә бөттөң». «Эй алла, һинең ҡулдарың ҡул түгелдер, фәрештә ҡанаттарылыр улар... Юҡһа, бөтә эш ҡулыңда был тиклем янып тормаҫ ине...»

Ҡабатлап булһа ла әйтәйек: башҡорт теле — бай тел. Ошо байлыҡтан оҫта файҙалана Зәйнәб Биишева. Әҫәргә йән, йәм, ҡан, образлылыҡ, нәфислек,

матурлыҡ, ғиззәтлелек биреүсе һүрәтләү-тасуирлау сараларына, төрлө биҙәктәргә килгәндә, Зәйнәб апай әҫәрҙәрендә улар шул килеш тә (халыҡтағыса), үҙгәртелеп тә ҡулланыла. Автор үҙе лә яңынан-яңыларын ижад итә. «Шәфҡәт фәрештәһе» тигәне халыҡта бар, әлбиттә. Ул башҡорттарҙа күптән әйтелә инде. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында, унан һуң да ныҡ активлашып китте, сөнки айбарлы ҡыҙҙарыбыҙ ут эсендә батырлыҡ күрһәтеп кенә ҡалманы, яугир күңелендә ялҡын ҡабыҙыусы изге йән (шәфҡәт фәрештәһе) булып та балҡыны. Зәйнәб апайҙың ҡулды фәрештә ҡанатына әүерелдереүе, ысынбарлыҡты шулай гипербола ярҙамында мәңгеләштерергә тырышыуы — нәфис һүҙ сәнғәте өлкәһендәге ижади ҡөҙрәте.

Һуңғы ваҡытта юғары уҡыу йорттарында әҙәби әҫәрҙәр теле махсус фән булараҡ уҡытыла башланы. Башҡорт дәүләт университеты филологтары был өлкәлә шаҡтай әүҙем эшләй. Мәҫәлән, Ф.Санъяров профессор М.Зәйнуллин етәкселегендә «Урал батыр» эпосының тел-стиль үҙенсәлеге тураһында кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланы. Шундай уҡ уңышлы яҡлау күптән түгел телмәр сәнғәте тураһында булды (етәксеһе — проф. М.Зәйнуллин, яҡлаусыһы — А.Сынбулатова). Миңә икеһенә лә беренсе оппонент булырға тура килде. Фәнзил Санъяровтың да, Айгөл Сынбулатованың да (телмәр сәнғәтен асыҡлау өсөн ул миҫалдарҙы Зәйнәб Биишева әҫәрҙәренән ала) хеҙмәттәре юғары баһаға лайыҡ булды. Иманым камил: яратҡан темалары буйынса улар оҙаҡламай докторлыҡ диссертацияһы ла яҡлаясаҡ. Ныҡ яратҡан темаң — ғашиҡ булған кешең кеүек бит ул. Уны ташлауы бик ауыр. Былай әйтеү урынһыҙҙыр, бәлки. Мәсьәлә шунда: сит илдә, рустарҙа әҙәби әҫәрҙәр теле, яҙыусылар теле шаҡтай ныҡ өйрәнелгән. Ә бына төрки халыҡтар донъяһында (шул иҫәптән башҡорттарҙа) был өлкә аҡһаҡлай әле. Шулай ҙа эш башланды, кем әйтмешләй, боҙ ҡуҙғалды, ул туҡталмаясаҡ инде. Бирһен Хоҙай! Башҡорттоң балы ғына түгел, баллы һүҙе лә бөтә ҡитғаларға тәм, йән, дан, заң таратһын! Шуны уйлаптыр, бәлки, әҙәби тел, әҙәби әҫәрҙәр теле, яҙыусылар теле тураһындағы хеҙмәттәр русса ла яҙыла башланы. Айгөл Сынбулатова ла рус телендә килештерҙе. Ул былай атала: «Башкирский речевой этикет: семантика и средства выражения (на материале произведений З.Биишевой)». Был ҡыланыш шәхсән мине ҡәнәғәтләндереп бөтөрмәй, әлбиттә. Ереңде башҡаларға һатҡан шикеллерәк була, йәнәһе. Ә инде рус телендә яҙып, яҡлап, китап итеп сығарғас, бал ҡорттарылай осороп, тәмен башҡа милләттәрҙән дә ауыҙ иттерһәң — шәп була икән дә. Инглиз теленә лә тәржемә итәлһә, Зәйнәб апайҙың ғына түгел, бөтә башҡорттоң теле тәме баллы бал ҡортолай таралаасаҡ донъя йөҙөнә. Хәҙерге тел ярышы бик боронғо ата-бабаларыбыҙҙыҡы ише генә түгел бит ул. Шаҡтай ҡатмарлы. Аҡ менән ҡараның шашып көрәшкән осоронда йәшәйбеҙ. Ә Ер йөҙө ҡара пәрәнжәгә төрөнә бара. Аҡ иман йыртып ырғытырға тейеш ул ҡара пәрҙәне. Илдәр ярышы иҡтисад, сәйәсәт, патриотлыҡ, эстетика, хеҙмәт, мәҙәниәт, тел илаһиәте ялҡыны яҡтылығында барасаҡ. Ер аҫты ла, ер өҫтө лә бай булған Башҡортостандың еңеп йәшәргә, «Бөйөк Башҡортостан» тигән эпитет менән баһаланырға бөтә мөмкинлектәре лә бар. «Аҡыл» тигән бөйөклөктө гел Алланан өмөт итеп кенә ятмайыҡ, үҙебеҙ иманлаштырайыҡ уны!

# Драматургтың илаһи рухиәте

## Наил Ғәйетбаев

Илаһ — ғәрәп һүҙе. Күп мәғәнәһе бар. Беренсеһе — «Һуғыш аллаһы». Икенсеһе — «Ғишыҡ аллаһы». Мәғәнәһе — беренсеһенекенә тартым. Әйтәйек, Бөйөк Ватан һуғышында беҙ дошманды хәрби техника менән генә түгел, тыуған илгә булған илаһи ҙур мөхәббәт рухы, ғишыҡлыҡ уты менән дә еңдек. Ш. Бабич, ана, нимә ти: «Ахырына ҡуйған хоҙай үҙ иманын, йәғни илаһи тамғаһын». Өсөнсөһө — «дини фәлсәфә ғилеме». «Рух» та — ғәрәп һүҙе. Йән тигәнде аңлата: кеше рухы, кеше йәне.

Ғәрәп теле төрки телдәргә унынсы быуаттарҙа йоғонто яһай башлай. Арттырып әйтһәк, тулҡын-тулҡын булып ағылып килә. Баҡсалағы еләктәрҙең иң бешкәнен, матурын, балҡып торғанын һайлап алған кеүек, нәфис һүҙ сәнғәте оҫталары ул һүҙҙәрҙең мәғәнәһе ҙур булғанын аңлап ҡуллана. Ҡырҡтан ашыу сәхнә әҫәре ижад иткән күренекле драматургыбыҙ Наил Ғәйетбай, ана, бер комедияһын тота ла ғәрәп һүҙе менән «Әстәғәфирулла» (Алланың кисереүен һорайым) тип атай. Ғ.Афзал былай ти: «Тьфү, әстәғәфирулла! Бәбекәйем Хәбибулла... Бесән бирҙе хоҙай юлда». «Дини фәлсәфә» тигәне Наил Ғәйетбай әҫәрҙәрендә фани донъя рухы менән кәрәҙләнеп китә. Философия (фәлсәфә), эстетика (матурлыҡ), этика (әҙәплелек), педагогика (тәртиплелек), психология (йән хосусиәте) драматург рухиәтендә үҙенсә бер ғилем булараҡ формалаша.

Әҙәби әҫәрҙе сәнғәти бер бөтөн итеү өсөн өс илаһилыҡ (тел, сюжет, тема) кәрәк булыу хаҡында әйткән ине М.Горький. Улар нәҙәри (йәки теоретик) яҡтан да өйрәнелә. Һуңғы йылдарҙа был етди мәсьәләгә иғтибар айырыуса артты, һүҙ сәнғәте оҫталарының теле юғары уҡыу йорттарында махсус фән булараҡ уҡытыла башланы хатта. Академик В.Виноградов әйткәнсә, әҙиптең (драматург, прозаик, шағир) үҙенә генә хас өслүби (стилистик) үҙенсәлеген асыҡлау мотлаҡ. Ошо ике хосусиәт туғанлашып китә Наил Ғәйетбай әҫәрҙәрендә. Бер уйлаһаң, ябай ғына кеүек. Икенсе уйлаһаң, ҡара урмандай ғәжәп серле, диңгеҙ һыуындай тәрән, күк йөҙөләй ҡатлы-ҡатлы ул. Әҙәби тел халыҡ теленә нигеҙләнә. Ләкин, Пушкин әйткәнсә, яҙыусының маҡсаты әҙәби телде халыҡ теле дәрәжәһенә төшөрөү түгел, ә бәлки халыҡ телен әҙәби тел сифатына күтәреү. Йәки, М.Горький әйткәнсә, халыҡ теле — «сей» тел, әҙәби тел — ҡәләм оҫталары тарафынан эшкәртелгән тел. Хәйер, был хаҡта кемдеңдер хан заманында уҡ әйткән ғибәрәһе лә бар: «Тел тигән дарья бар, төбөндә ынйы-мәрйен бар; телгәндәр сумып алыр, телмәгән ҡоро ҡалыр».

Башҡорт теле — бай. Уның диңгеҙе — ифрат киң. Сум. Арҡырыға-буйға йөҙ. Төбөнә төш. Сүплә халыҡ ижады ынйыларын. Әммә уның менән генә ҡәнәғәтләнмә. «Әҙергә — бәҙер» булма. Эшкәрт телде. Үҙ хосусиәтеңде, үҙ рухиәтеңде күрһәт. Ошо ауыр, серле, етдилек талап иткән үҙенсәлекле ижадта ҙур оҫталыҡ күрһәтә драматург Наил Ғәйетбай ғали йәнәптәребеҙ. Фразеологик һүҙбәйләнештәрҙе генә алайыҡ. Тел ғалимдары уларҙы «ҡатып ҡалған» тип тә әйтә. Ундайҙар ҙа бар. Шулай ҙа һүҙ сәнғәте оҫтаһы уны үҙгәртә лә ала. Үҙе лә яңыларын ижад итә. Уның матур өлгөләрен Л.Толстой, М.Горький, М.Шолохов, М.Ғафури, М.Кәрим, Һ.Дәүләтшина, З.Биишева һәм башҡалар күрһәтте, һуңғы осорҙа (бигерәк тә егерменсе быуат баштарында) киңәйтелгән (контаминацияланған) фразеологик һүҙбәйләнештәр барлыҡҡа килде. Башҡорт әҙәби теле диңгеҙендә улар һаман ишәйә бара. Наил Ғәйетбайҙың ҡырҡтан

ашыу драма әҫәрҙәренән үҙе ижад иткән ғибәрәләрҙе һанап сығыу ҙа ауыр. Улар аҙ һүҙ менән күп мәғәнә аңлатырға, драматургтың эстетик идеалын, фекер йөрөтөү офоҡтарының киңлеген самаларға, ниндәйерәк илаһиәтлелек менән ҡоралланып яҙыуын белергә ярҙам итә. «Дүрт кешелек табын» драмаһынан бер миҫал: «...кәкре мөрйәле донъяның Салауат тоҡомдарындағы ирҙәрҙе мөшкөл хәлгә төшөрөүе». Бында өс фразеологик берәмек синтезлашып киткән. Авторҙың индивидуаль ижад емеше был. Ундағы фекер өс быуат дауамында барған хәл-ваҡиғаларҙы үҙ эсенә ала, хәҙерге йәшәйешебеҙ хаҡында ныҡ уйланырға ла мәжбүр итә. Быларҙы аңлатыу өсөн бик күп яҙырға тура килер ине. Драматург уны үҙе ижад иткән бер конструкция (төҙөлмә) эсендә биреү оҫталығына ирешә. Ошо уҡ драманан йәнә ҡанатлы ғибәрәләр: «кешенең ғашиҡ булғас йәшәреүе», «мөхәббәт тә саф булырға тейеш», «елгә ҡаршы төкөрөп, бер ни иҫбат итә алмау», «хәҙерге кешенең рәхимһеҙ булыуы», «бер кемгә ышанып булмаған донъя», «стресс хәлендә оҙаҡ йәшәп булмай», «хәҙерге бисәләргә ир тигән ҡол кәрәк», «эгоистарҙың ҡаймаҡ өҫтөндәге май тормошо хаҡында хыялланыуы», «һылыу кеше өҫтөндәге йөҙ начальник», «ҡоллоҡтоң фәхишәлек тыуҙырыуы», «беҙҙең илдә бер кемдең үҙ-үҙенә хужа була алмауы», «тыштан саф булып күренгән дошмандарҙың күбәйеүе», «телһеҙ шағирҙың үле шағир булыуы», «йөрәк ҡанын алтын итеп соҡоған эттәр», «күңелдең ҡол булыр өсөн тыумауы», «кеше ғүмеренең идеяға ҡарағанда арзаныраҡ булыуы» һ.б. Драматургтың был ҡатмарлы фразеологик берәмектәренең һәр береһе нигеҙендә әҫәр яҙырлыҡ хатта. Ҡонтаминацияланған төҙөлмәләр күберәк сәсмә әҫәргә хас. Ә бына Наил Ғәйетбай уларҙы сәхнә әҫәрҙәрендә ҡулланыу оҫталығына ирешә.

Тел фәнендә «экономиялылыҡ» тигән термин бар. Халыҡ ҡыҫҡа һөйләргә ярата, һүҙ эсендә алтын бар, ти ул. Аҙ һүҙ — алтын, күп һүҙле — болтун, тип тә әйтә. Эстетик зауығы һаман үҫә барған халыҡ, йәмәғәтселек был мәсьәләгә хәҙер айырыуса ныҡ иғтибар итә. Эш бүлмәләрендә: «Аҙ, мәғәнәле, тиҙ һөйлә», — тип яҙып ҡуйыуҙар шуның бер миҫалы. Быны атылған йондоҙҙай тиҙ хәрәкәтле компьютер заманы талап итә. Элек бишәр шаршаулы пьесалар яҙыла ине. Оҙон-оҙон монологтар һөйләп яфалана торған ине артист. Спектаклдәр хатта 4—5 сәғәткә һуҙыла. Ундай замандар үтте инде. Ҡырас еле булып иҫте лә китте. 100—150 битлек пьесалар ҡалманы. Хәҙер 35—40 битлек сәхнә әҫәрҙәре заманы. Ҡыҫҡалыҡта — оҫталыҡ, һүҙ эсендәге алтынға иғтибар ҙур. Ҙур идея, эпик киңлек, халыҡ рухы, ил яҙмышы тантана итһен. Ҡыҫҡалыҡ! Ҡыҫҡалыҡ!! Ҡыҫҡалыҡ!!! Телдәге «экономиялылыҡ»ҡа ҙур иғтибар бирә Наил. Уның шулай икәнлеген һәр береһе нигеҙендә әҫәр яҙырлыҡ ҡатмарлы фразалар ижад итә белеү ҙә раҫлап тора. Тел, сюжет ҡора белеү, тема һайлау оҫталығы күрһәтә драматург. Шуның аша Наил Әсхәт улы 150 битлек пьесаны 30 битлек (2 сәғәтлек) сәхнә әҫәре рәүешенә еткерә — ҡыҫҡартыу аша үҫтерә!

Әҙәби әҫәрҙең сәнғәти ҡиммәте образлылыҡ (һүҙ-һүрәт), идеялылыҡ (мәғәнә), эмоционаллек (хис-тойғо) менән дә бәйле. Шуларҙың береһе генә етмәһә лә, әҫәр, фронт инвалиды шикелле, аҡһауға дусар була. Образ айырым һүҙҙәр (исем, сифат, һан, ҡылым), сағыштырыу, эпитет, метафора, башҡа тасуирлау саралары, төрлө поэтик биҙәктәр ярҙамында яһала, һәр жанр өсөн тәғәйен ҡуйылған һүрәтләү-тасуирлау саралары юҡ, әлбиттә. Шулай ҙа сәсмә әҫәрҙәрҙә поэтик саралар пьесаларға ҡарағанда мулыраҡ ҡулланыла. Кеше — кейеме, болон — сәскәһе менән матур булған кеүек, сәхнә әҫәрҙәре өсөн дә күркәм сифаттар ят түгел. Наил Ғәйетбай ошо үҙенсәлектәрҙе лә иҫкә алып яҙа.

Донъя, бөтөн ғаләм, тормош, тәбиғәт ҙур мөхәббәт менән ләззәтләнеп йәшәй. Мөхәббәт донъяһында сағыштырыуҙар күп. Телсе ғалимдар сағыштырыуҙарҙы ниндәй лексик-грамматик саралар ярҙамында яһалыуҙары буйынса өйрәнә, һуңғы ваҡытта ул философия фәнендә танып-белеү (познание), һиҙемләү (ощущение), сағылыш (отражение) категориялары менән бер яҫылыҡта ҡарала башланы. Был киң ҡоласлы категорияның эске мәғәнәһенә боронғолар ҙа иғтибар иткән: «Сағыштырыу — танып-белеүҙең атаһы», — тигән улар. Әҙәби әҫәрҙәрҙә сағыштырыу образ тыуҙырыусы сара булараҡ ҡулланыла. Башҡорт әҙәби теле һүрәтләү сараһының был төрөнә лә бай. Шулай ҙа һүҙ сәнғәте оҫталары мең мәртәбә ҡулланылып, мең тапҡыр тапалған, төҫө уңған, ҡәҙере киткән сағыштырыуҙар менән яҙыуҙы хуп күрмәй. Әҫәрҙең идея-эстәлеге, герой-ҡаһармандары, сюжет-композицияһы талап итһә, заман һулышын иҫәпкә алып, әҙип үҙе лә яңыларҙы ижад итә. Наил Ғәйетбай шундай юғары талаптар илаһилығы менән яҙа. Уның эске рухиәте шуға көйләнгән. Ул философик фекерләү аша ижад итә. Сағыштырыуҙары төрлө лексик-грамматик саралар ярҙамында яһала. Персонаждарҙың эске халәте, донъяға ҡарашы, эш-ғәмәле ошо тел-биҙәк сараһы менән тағы ла тәрәнерәк асыҡлана. Һәҙиә менән Рәми образдарын сағылдырған «Төн» трагедияһынан бер миҫал.

«***Рәми.*** Көнөм һыуыҡ, күңелдә тик ел илай. Әйтерһең, ул яҡтыһы юҡ болот ҡыҫҡан яҡты ай. Партия — заманыбыҙҙың аҡылы, намыҫы һәм выжданы! Партия беҙҙең өсөн иң изге нәмә. Партия әсәләрҙән дә ҡәҙерлерәк.

***Һәҙиә.*** Таң ата, таң! Күрәһеңме, офоҡ ҡыҙыллана! Төн үтте!

***Рәми.*** Был таң түгел, Һәҙиә апай, ҡан! Партия һәләк иткән миллиондарҙың ҡаны!»

Ел образы төрки телле халыҡтарҙа әүәл-әүәлдән билдәле бер стилистик сара булараҡ ҡулланыла. Ҡол Ғәлиҙә, мәҫәлән, таң еле Яҡуб пәйғәмбәргә улы Йософтоң донъяла барлығы, батыр йөрәкле, кешелекле булыуы тураһындағы хәбәрҙе алып килә. Туҡай ел илауы аша егерменсе быуат башында ярлы халыҡтың ауыр тормошон тасуирлай (Көҙгө төн. Мин йоҡлай алмайым. Өй түрендә ел илай...) Наил Ғәйетбайҙа ел илауы ил яҙмышы, халыҡ яҙмышы, Ватан яҙмышы менән бәйле.

Йәнә миҫалдар: «Һөт өҫтөндәге май кеүек йөҙөү» («Аҡмулла», трагикомедия), «Рәйлә — торғаны Наполеон, Ләйлә — үҙ-үҙенә ғашиҡ дура. Ләйсән? Уға эскесе түгел, композитор кәрәк. Кешегә иң башта күңел байлығы һәм мөхәббәт кәрәк. Мөхәббәт бит — рухи берҙәмлек. Яратмайым бөрсә кеүек егеттәрҙе, һеҙ ниңә улай кейенеп алдығыҙ әле?» «Берегеҙ попугайға, икенсегеҙ страусҡа оҡшап киткәнһегеҙ» («Ауылға ҡыҙҙар килде», комедия); «Бер ай элек ҡайҙа булғанлығымды хәтерләргә мин һиңә компьютер түгел» («Тойғолар ниңә һүнә?», драма).

Сәхнә әҫәрендә, прозалағы кеүек, тәбиғәт күренештәрен һүрәтләү мөмкинлеге юҡ. Шулай ҙа, эмоционаллек сылбырын өҙмәҫкә тырышып, тәбиғәт рухын әҫәр туҡымаһына оҫта ғына сигеп һала белә Наил Ғәйетбай.

***Вазифа.*** Ғилман, ҡара теге ике турғайға, яндарына ике турғай килде. Сырсыу киләләр.

***Ғилман.*** Парҙарын тапҡандар, тимәк, туй үткәрәләр («Яусы йыһан, йәки нисек кейәүгә сығырға?», комедия-уйланыу).

Ҡоштарҙағы мөхәббәт ялҡыны көслө булыу һәр кемгә мәғлүм. Кеше туйы менән ҡоштар туйын сағыштырыу эмоционаллек йәки хис-тойғо ғына түгел бында. Ҡоштарҙа ла, кешеләрҙә лә дөрләй мөхәббәт ялҡыны. Кешеләрҙәге мөхәббәт рухиәте оҙаҡ һаҡлана. Шул илаһилыҡты күрһәтә драматург.

Аҡ менән ҡараның киҫкен көрәше осоронда йәшәйбеҙ. Киҫкенлек — бөтөн ер йөҙөндә, мәмләкәттәр араһында, тәбиғәттә, кешеләр йөрәгендә. Аҡ — изгелек сифаты: аҡ юл, аҡ хыял, аҡ бәхет. Ҡара — ҡараңғы, ҡайғылы, күңелһеҙ ваҡиға-күренештәр менән бәйле. «Аҡ», «ҡара» эпитеты халыҡта киң ҡулланыла. Бер һүҙ менән күп төшөнсә аңлатырға кәрәк булғанда, Наил Ғәйетбай ҙа улар менән оҫта эш итә. Был осраҡта ла ул үҙ табышы менән һоҡландыра. «Аҡ тәүбә, ҡара тәүбә», — ти Бикә «Әстәғәфирулла» комедияһында. Халыҡта улай әйтеү юҡтыр. «Аҡ тәүбә», «ҡара тәүбә» Бикәнең йөрәк илаһилығы аша һөйләшеүен аңлата. Ул илаһилыҡта — персонаждың үҙ рухиәте, үҙ эске донъяһы, үҙ хосусиәте.

Мәғәнәләре яғынан эпитеттар икегә бүленеп ҡарала: логик эпитет (аҡыллы кеше, сибәр кеше, етди кеше), метафорик эпитет (алтын һүҙ, ҡорос йөрәк, тимер ҡул). Драматург уларҙың икеһе менән дә иркен эш итә. Ләкин тура мәғәнәле эпитеттары ла уның ҙур рухиәтлектәр менән бәйле.

***Муса.*** Юҡ! Ауылға китәм! Таҙа, саф ҡыҙ табам! («Илама, һылыу», драма).

Былай әйтеү ҡасандыр кәрәк булмағандыр. Ә хәҙер? Бик урынлы. Нимә генә тимә, беҙҙең мосолман ҡыҙҙары күптәнге әҙәплелек, инсафлылыҡ, ғиззәтлелек, ғиффәтлелек, шәфҡәтлелек традицияһын һаман һаҡлай әле. Шөкөр, ауыл ҡыҙҙарының рухи иманында яңырыу сифаттары бар. Был дин, мәсет, мулла рухиәте менән бәйлелер, бәлки. Был — бер. Икенсенән, драматург, минеңсә, тормоштағы драманы, комедияны, трагедияны сәхнәлә тамашасыға күрһәтеү маҡсатын ғына ҡуйырға тейеш түгелдер. Ул драматург ҡына түгел, илаһи изге көс менән ҡоралланған шәхес булырға тейеш. «Драматург-педагог», «драматург-психолог», «драматург-философ» тигән һүҙҙәрҙе лә әйтке килә. Әгәр ауыл ҡыҙҙарының таҙа, саф булыуы тураһындағы һүҙҙәр сәхнәлә яңғыраһа йәки улар китаптан уҡылһа, ауыл ҡыҙҙарының сафлыҡҡа ынтылышы тағы ла көсәйәсәк бит. Һүҙ — күңел емеше, һүҙ — йөрәк дарыуы, һүҙ — иман, һүҙ — илаһ, һүҙ — рух, һүҙ — йән аҙығы... Был эпитетты ошо хаҡта уйлап ҡулланғандыр драматург. Бына ни өсөн драматург — педагог та, психолог та, философ та.

Драматургтың ҡырҡтан ашыу сәхнә әҫәрендә төрлө тәбиғәтле кешеләр бар. Улар хаҡында оҙон-оҙаҡ һөйләп тороу мөмкинлеге юҡ. Күп персонаждарҙың эске донъяһы, аң-аҡылы, хис-тойғоһо, йәшәү рәүеше, йәшәү хәләте, башҡа сифаттары яңғыҙ эпитет менән генә лә белдерелә: рәхимһеҙ кеше («Дүрт кешелек табын», драма); ғәзел Морат, шамбы Барый («Тынғыһыҙ тән», трагикомедия); уйнаш атай, ҡарт кәзә («Аты барҙың — дәрте бар», комедия); мыжыҡ ир («Ҡейәү әйттереү», комедия) һ.б. Эпитеттар кеше дәрәжәһенең шәүкәтлелеген тел саралары ярҙамында сағылдырыу йәһәтенән дә файҙаланыла: илһамлы һүҙ («Аҡ төндәр, йәки Аҡмулла», пьеса). Төрлө тормош-көнкүреш хәлдәренә, бөгөнгө йәшәйешкә, замана һулышына метафорик, логик эпитеттар тапҡырлығы менән баһа бирелә: сепрәк туй, быяла туй; бөгөнгө аңлайышһыҙ, бысраҡ заман («Яңы башҡорт, йәки был кешегә ни етмәй?», трагикомедия). «Сепрәк туй», «быяла туй» тип әйтеү халыҡта юҡ. Былар ҙа — авторҙың үҙ табышы. Ни өсөн сепрәк? Ни өсөн быяла? Бер һүҙ күпте уйларға мәжбүр итә. Күп туйҙар сепрәккә алданып яһала хәҙер. Ләкин улар быяла һымаҡ селпәрәмә килә. Был хаҡта драматург күп һөйләп тормай. Әйткән һүҙ — атҡан уҡ, тигәндәй, һүҙ уғы менән күп мәғәнә аңлата ла ҡуя. Замананы аңлайышһыҙ, бысраҡ тигән логик эпитеттар ярҙамында баһалау юғарыла телгә алынған аҡлыҡ, ҡараңғылыҡ төшөнсәләре менән бәйле. Ҡаралыҡ өҫтөнлөк алһа, кеше күңелен томан ҡаплай. Ҡаралыҡ шашынһа, бөтөн ил фажиғә утында яна. Быға «Прометей» трагедияһы ла миҫал. Ҡаралыҡ

ныҡ ҡоторһа, Ер йөрәге шартлаясаҡ. Эйе, драматург әйткәнсә, аңлайышһыҙ был. Болғансыҡ һыуҙа йөҙмәй балыҡ. Кешенең бысраҡ донъяла йәшәүе мөмкин түгел. Ошо хәҡиҡәтте баһалап бөткөһөҙ. Ошо хаҡта уйлана ул. Борсола. Күңеле ярһый. Йөрәге өҙгөләнә. Былай ҡыланыуҙа бер хәжәт тә юҡ, әлбиттә. Тормошто хәситә менән генә матурлап булмай. Замана ҙурыраҡты талап итә. Әйтелгәнсә, халыҡтың эстетик зауығы һаман үҫә, фекер йөрөтөү офоҡтары киңәйә бара. Бай, матур, гүзәл тәбиғәтле Башҡортостан ерен, бал илен, һандуғас донъяһын бысратыу ҙур гонаһ. Драматургтың сәхнә әҫәрҙәрендә ошо идея ла мөбәрәк тәсбих төймәләрендәй теҙелеп китә. Наил Ғәйетбай драма, трагедияға ҡарағанда комедия яҙыуҙы, көлдөрөүҙе мәслихәт күрә. Тик ул хикмәтһеҙ көлөү генә түгел. Бысраҡлыҡҡа бомба булып төшһә, сафлыҡҡа байраҡ елберҙәтә. Көлөүҙә күп бысраҡлыҡтар көлгә әүерелһә, ыңғай яҡтар кешелеклелек сифаты менән бәйле булып сыға. Драматургтың юмор утын, сатира ялҡынын ни өсөн дөрләткәнлеге аңлашыла булһа кәрәк. Илаһ, рух кеүек һүҙҙәрҙе комедия рухына яҡынлаштыра белеү шуның менән аңлатыла. «Алыш-биреш, йәки һинән — фатир, минән — ир» комедияһында, мәҫәлән, Ансар ауыр ваҡыттарҙа ҡатыны менән түгел, үҙ рухы, үҙ йәне менән кәңәшләшергә ярата. Быларҙы драматургтың эстетик идеяһына бәйләп ҡарарға кәрәктер.

Яҙыусы өсөн туған телдең һүҙлек хазинаһы (лексик состав), грамматик төҙөлөшө уртаҡ. Индивидуаль стиль шул уртаҡлыҡтарҙы үҙенсә ҡуллана белеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. «Күктә йондоҙҙар ни саҡлы, телдә һүҙҙәр шул саҡлы», тип әйтәләр. Йондоҙҙарҙың да төрлөһө бар. Антарес йондоҙо, әйтәйек, ҡояшҡа ҡарағанда 480 тапҡырға ҙурыраҡ. Ә Канопус йондоҙо ҡояшҡа ҡарағанда 80 мең тапҡыр артыҡ йылылыҡ бирә. Астрономдар Ҡояшты «кәрлә йондоҙ», «һары кәрлә» тип йөрөтәләр. Наил Ғәйетбай һүҙ ҡеүәтен бына шул Канопус, Антарес кимәленә еткерә белә. Нисек кенә булмаһын, йондоҙҙар — матурлыҡ, гүзәллек, мөхәббәт, илаһилыҡ, рухиәт символы. Был символдар драматургҡа персонаждарҙың эске донъяһын, аң-аҡыл ҡөҙрәтен, хис-тойғо ялҡынын асыҡлау өсөн кәрәк. «Илама, һылыу...» драмаһында, мәҫәлән, Кәбир менән Сания берҙәмлеген Муса «Мөхәббәт сәхнәһе» тип атай. Бөтөн донъяның мөхәббәт илаһилығында ҡанат ҡағыуы тураһында әйтелгән ине инде. Кешенең Ерҙә йәшәйеше атабыҙ Әҙәм, әсәбеҙ Һауа мөхәббәте менән бәйле. Илаһилыҡ, рух, мөхәббәт, иман, изгелек, ләззәт кеүек һүҙҙәр эске мәғәнәләре буйынса «туғандаштар», фәнни телдә әйтһәк, синонимдар. Был синонимдарға йән рухы, йөрәк ҡыҫтауы, күңел күбәләкләнеүе, хис-тойғо ҡайнарлығы, аң-аҡыл шәүкәтлелеге менән табына драматург. Уларҙы «поэтизмдар» (матур яңғырашлы һүҙҙәр) тип тә йөрөтәләр. Бында тышҡы матурлыҡ менән эске матурлыҡтың бер бөтөн булыуы бар. Уларҙың эске, йәшерен мәғәнәһе әҫәр туҡымаһында башҡа лексик берәмектәр менән «туғанлашып» киткәндә генә аңлашыла. Драматург әҫәренә иғтибар итәйек: «рухтарыбыҙға ирек бүләк итеү» («Тынғыһыҙ тән»); «бай рухлы кеше» («Аҡ төндәр»), «мөхәббәт — рухи берҙәмлек» («Ҡомартҡы, киллер һәм мөхәббәт»); «йөрәк мәрйене» («Аҡ төндәр»); «сәскә атыу», «рух бөйөклөгө», «алтындай йәр», «матур, изге әкиәт донъяһы»; «бар, улым, йәне булмаһа, ул үҫмәҫ ине, йөҙөн ҡояшҡа бормаҫ ине. Сәскә лә кеше кеүек тоя. Сәскәгә һуҡһалар йәки өҙһәләр, уның тәне ауырта, ул илай, әгәр уны һыйпаһаң, йәки матурлығына һоҡланһаң, ул ҡыуана» («Салауат алты йәшендә», пьеса) һ.б.

Эсе тулы алтын орлоҡтарҙы туплай-туплай, мәғәнә йомғағына әүерелгән был һүҙҙәрҙе һүтеп ҡарау мөмкинлеге юҡ. Беҙгә лә, халыҡ әйткәнсә, «ҡыҫҡалыҡта — оҫталыҡ» тигән «хәситә» менән эш итергә кәрәк.

Һүҙ сәнғәтенең йәмәғәтселектә, халыҡта, инсаниәтселектә ҡулланылыу мәсьәләһенең фәнни нигеҙе менән беҙҙең эраға тиклем йәшәгән боронғо Юнан ғалимы Аристотель (философ, телсе, әҙәбиәтсе, филолог) ныҡ шөғөлләнгән. Телдәге өс стиль теорияһын асыҡлай ул. Юғары стилгә әле беҙ һүҙ йөрөткән поэтизмдар, ораторҙарҙың фәлсәфәүи сығыштары, эсендә алтын, тышында көмөш йөрөткән аҫыл мәғәнәле һүҙҙәр инә. Түбән стиль халыҡ телендәге ябай һүҙҙәрҙе үҙ эсенә ала. Урта стиль юғары һәм түбән стиль ҡатнашлығында була. Рәсәйҙә унһың менән бөйөк ғалим Ломоносов шөғөлләнә. Унынса, сиркәү-славян һүҙҙәре юғары стилде тәшкил итә. Ҡалған икеһе — Аристотелдәгесә. Өс стиль теорияһы тора-бара филология фәнендә ныҡлы урын ала. Ул хәҙер ҙә йәшәп килә әле. Жанрҙар (поэзия, проза, драматургия) буйынса фекер йөрөткәндә лә шуларға таянып эш итергә тура килә. Мөхтәрәм драматургыбыҙ Наил Ғәйетбай, нигеҙҙә, урта стиль менән яҙа. Түбән стиль менән дә бик оҫта эш итә. Тупаҫ һүҙҙәр ғәскәре лә үҙ урынында ҡулланыла: ҡәбәхәт, эт, хайуан, әшәке, дурак, шайтан, бисура, тиҫкәре, йәнһеҙ, фәхишә, хөрәсән, молокосос, аждаһа, сволочь, подлец, дура, битһеҙ, бысраҡ, кәнтәй, ахмаҡ, тараҡан, бөжәк, хаин, диуана, йыртҡыс, иҫәр, тиле, бандит, түмәр, эскесе, алкаш, уйнашсы, оятһыҙ, хәстрүш, сусҡа, меҫкен, ишәк, фашист, маймыл, ҡанһыҙ, шүрәле, тинтәк, злодей, бунтовщик, изменник, бөрсә, крыса, һағыҙаҡ, иҫәрбаш, бәғерһеҙ, хамелеон, этлек, зверь, маньяк, иблис...

Кешене бер һүҙ менән генә характерлау хан заманынан бирле килә. Беҙҙең ауылда, ана, ниндәй Хажиҙар бар ине: Бүре Хажи, Әжәл Хажи, Табан Хажи, Ҡамыр Хажи, Һөтсө Хажи. Әгәр сәхнә әҫәрендә ун персонаж бар икән, шуның бишеһе кире йәки тиҫкәре (М. Горький фекере) булырға тейеш. Наил Ғәйетбай ҙа был мәсьәләгә етди иғтибар итә. Әлеге тупаҫ һүҙҙәр, ҡара болоттан яуған ямғыр кеүек, тиҫкәре персонаждар өҫтөнә һибелә. Драматург, бәлки, уларҙы ҡыйынһынып ҡуллана торғандыр. Ни генә тимә, үҙе әйткән «Мөхәббәт сәхнәһе»нә, ҡыҙарып бешкән еләктәргә күл һипкәндәй, яман һүҙҙәр ырғытҡыһы килмәй. Шулай ҙа «Мөхәббәт сәхнәһе» — «тормош сәхнәһе» лә бит әле ул. «Тормош сәхнәһе» театр сәхнәһенә күсерелә. Әйтелгәнсә, элеккенән килгән аҡ, ҡара көрәше дауам итә: аҡлыҡта — сафлыҡ, ҡаралыҡта — алйотлоҡ. Драматургтың маҡсаты: аҡлыҡты илаһилаштырыу, ҡаралыҡты — һүҙ атакаһы менән тар-мар итеү. Эт эсенә һары май килешмәгәндәй, эт кешегә кәрәкмәгәнгә алтын һүҙ әйтеү иҫке кейем йыртығына яңы ямаулыҡ һалырға маташыу кеүек кенә. Әйтәйек, «Дүрт кешелек табын» драмаһында Иректең кәпәренеү утын Дамир «Алдайһың, эт!» тип һүндерә. «Эт» һүҙе Иректең йөрәгенә уҡ булып килеп ҡаҙала.

Драматург тел диңгеҙе төбөнән аҫыл һүҙҙәр эҙләргә ярата. Мәғәнәләш һүҙҙәрҙе (синонимдарҙы) бер-береһенә оҡшаш һалдаттарҙай теҙеп ҡуя, иң кәрәклеләрен һайлап ала белә. Һайлап алынған һүҙ, атҡан пуля кеүек, тейешле персонаждың йөрәгенә барып ҡаҙала. Был поэтизмдарҙы, башҡа лексик хазинаны, тупаҫ һүҙҙәрҙе ҡулланғанда ла шулай. Драматургтың ҡырҡлап сәхнә әҫәренән алтмыш туғыҙ тупаҫ һүҙ һайлап алғанмын. Уларҙы мәғәнәләштәр йәки синонимдар тип атарға мөмкин. Барыһы ла персонаждарҙың ҡара яҡтарын асыҡлауға ярҙам итә. Әммә һәр береһенең үҙенә генә хас мәғәнә үҙенсәлеге бар. Ул мәғәнәне ослар өсөн ваҡыт-ваҡыт бөтөн әҫәрҙе уҡып сығырға кәрәк. Береһендә йә сатира, йә юмор уғы була. «Академтеатрҙа ғәйбәт тә академический», — ти драматург бер урында. Быны уҡып, көлөп ебәрҙем: «Һм... академический ғәйбәт»... Быны аңлатыу өсөн күп яҙырға кәрәк. Ямаулыҡты йыртығына ҡарап таба белә Ғәйетбай.

Был мәҡәләне яҙыр алдынан мин күңелемдә башҡа драматургтар донъяһына ла сәйәхәт иттерҙем. Шекспир, Дюрренмат, Чехов, Гоголь, Горький, Островский, Ғ.Ҡамал, Ҡ.Тинчурин, Т.Ғиззәт, М.Фәйзи, С.Мифтахов, М.Ҡәрим, И.Абдуллин, Н.Асанбаев, Т.Миңнуллин, И.Юзеев, Р.Сафин һәм башҡалар. Уларҙың нәфис һүҙ сәнғәте оҫтаһы булыуҙары, сюжет төҙөү маһирлыҡтары, характерҙарҙы индивидуалләштереү шәүкәтлелектәре, был ауыр жанрҙа күрһәткән хосусиәттәре иҫкә төштө. Ғәйетбайҙың һиҙгер күңеле, аң-аҡылы, хис-тойғоһо уларҙың ижад баҡсаһында нисек хозурланып йөрөгән, үҙ рухына, үҙ йәненә, үҙ илаһилығына драматургияның ниндәй асыл, ҡиммәтле, тәмле емештәрен һайлап ала белгән — шул хаҡта етди уйланырға тура килде.

Бала заманына ҡарап үҫә. Драматург та шулай. Ҡлассик драматургия бар. Ярай. Донъя драматургияһын илаһи бер бөтөн итеп алып, был бөтөнлөккә анализ яһап, фекерҙәрҙе синтезлап уйланһаҡ, инсаниәтлелек өсөн ҙур хазина икәнен аңларбыҙ. Хәҙер инде Наил Ғәйетбай был хазинаның алтын бөртөктәрен йыя. Алтындың да ҡиммәтлелеге замана бизмәненә ҡарап үлсәнә бит ул. Егерме беренсе быуат. Ҡомпьютер заманы. Булдыҡлылар яңылыҡ эҙләп баш вата, таш яра, тау аҡтара һәм үҙ ынйымәрйенен тапмайынса ҡалмай. Наил Ғәйетбай шундай шәхес булып сыҡты. Замана рухына, осор илаһилығына, бәндәләр һулышына ярашырҙай үҙ стилен уйлап тапты. Стиль бар — драматург бар. Стиль юҡ — драматург юҡ. Стиль бар — драматург уңышлы. Стиль юҡ — драматург уңышһыҙ. Наил драматургияла үҙ бәхетен үҙ стиле менән тапты. Ҡорал эшләй — ир маҡтана, ти халыҡ. Ҡәләм эшләй — драматург маҡтана. Ҡәләм осонан аҡ ҡағыҙға аң-аҡыл хазинаһы, хис-тойғо ялҡыны, йөрәк уты ынйыларын төшөрә белеү менән маҡтана. Ни тиһәң дә, сәхнә әҫәре Наил кеүек әҙиптәрҙең ҡәләм осонан төшә бит, ә театр иһә уны тамашасыға еткерә генә.

Стиль — ҙур төшөнсә. Уны ябай ғына итеп тә аңлатып була. Ниндәй генә сәхнә әҫәрен уҡып ҡарама, ул үҙе үк: «Мин Наил Ғәйетбайҙыҡы», тип ҡысҡырып тора. Мәҡәләлә ошо мәсьәләне асыҡларға тырышылды. Ул художество оҫталығы менән бәйле. Оҫталыҡта һүҙ илаһилығы. Наил Ғәйетбайҙың һүҙ оҫталығын бер әҫәренә анализ яһап ҡына ла асыҡларға мөмкин. Ләкин миңә әлеге ҡырҡлап пьесаның барыһын да уҡып сығырға тура килде. Улар тураһында кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертациялары яҙырға була. Минең үҙемдең фәнгә инеп китеүемдең бер сәбәбе бар. Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусылары М.Ғәйнуллин, Т.Ҡилмөхәмәтов, Р.Әхмәҙиев башҡорт драматургияһы буйынса докторлыҡ диссертацияһы яҡлағайны. Улар хеҙмәттәрен үҙ осоро менән бәйләп эш итте. Ҡабатлап булһа ла әйтәйек, хәҙер яңы осор, егерме беренсе быуат. Яңы осорҙа яңы драматургтар яңы режиссёрҙар етәкләгән яңы театрҙар өсөн яңыса яҙа...

Хәҙер драматургияла эске һәм тышҡы хикмәттәр бар. Тышҡыһы йәки формаль яғы ҙур ваҡиғаларҙы ҡырҡ биткә һыйҙыра белеү, уйнаусыларҙы 4—5 кешенән арттырмаҫҡа тырышыу, төрлө лексик мәғәнәле һүҙҙәрҙе әҫәр туҡымаһына йәлеп итеү, һүрәтләү-тасуирлау сараларын, фразаларҙы ҡулланыу менән билдәләнә, һәр тел сараһының эске мәғәнәһе, аҫыл рухы, әҙәби әҫәрҙең идея-эстәлеген асыҡларҙай ҡөҙрәте, йәне, ҡаны булырға тейеш. Икенсе төрлө әйтһәк, форма менән мәғәнәнең бер бөтөн булып кәрәҙләнеүе талап ителә. Драматург Наил Ғәйетбайҙың ошо кәрәҙләй белеү оҫталығы шатландыра. Ысынбарлыҡ тураһында фәлсәфәүи фекер йөрөтөүе лә һоҡландыра. Аңлы, белемле драматург ул.

Хозур олон — ныҡлы тамыр бәрәкәте. Был бәрәкәт алтын ботаҡтар ебәрә. Алтын ботаҡтар ҡеүәтен көмөш япраҡтар данлай. Был күренеш «һүҙҙең эсе — ал-

тын, тышы — көмөш», тигәнде лә хәтерләтә. Наил Ғәйетбай ныҡлы тамыр — тема һайлай белә. Өҫтән ҡарағанда, ул әллә ни әһәмиәтле булмағандай тойола. Бәй, уҡый башлаһаң, ҡара ер күкрәген тишеп сыҡҡан аҡ сәскә тиҙ генә тармаҡланып киткәндәй, драматургтың «ваҡ» темаһы ҙурая ла китә. Ваҡыт-ваҡыт бер ихатала барған ваҡиға бөтөн ил эсендәге тормош-көнкүреш, сәйәси, иҡтисади, тарихи хәл-әхүәлдәр менән бәйләнә. Тел оҫтаһы булыу ҡөҙрәте был. Ә бит Салауат («Еңеү йәки Салауат»), Аҡмулла («Аҡ төндәр»), Бабич («Йөрәктәрҙә ҡалдың йыр булып») кеүек иманлы шәхестәрҙе театр сәхнәһендә күрһәтеү өсөн үҙеңә лә иманлы, философ-драматург булырға кәрәк. Һәр береһенең үҙ осоро, үҙ илаһилығы, үҙ рухиәте, үҙ аллаһы (әгәр шулай тип әйтергә яраһа). Уларҙың эске донъяһын асыҡлау өсөн тел диңгеҙендәге һүҙ гәүһәрҙәрен табыу мотлаҡ. Сәйәси, иҡтисади, тарихи, ижтимағи мәсьәләләр тураһында фекер алышҡанда, хис-тойғоға ҡарағанда аң-аҡыл өҫтөнлөк итә. Ҡаһармандар маңлайға маңлай бәреп һөйләшә. Бындай ваҡытта сюжет-хәрәкәт сылбырына публицистик стиль дә өҫтәлә. Ваҡыт-ваҡыт фәнни стиль орлоҡтары ҡойолоп ала һымаҡ. Шулай ҙа улар үҙәк сылбырға ялғана алмайҙар.

Тыныш билдәләренә лә етди иғтибар итә драматург. Күп урында ҡулланылған өс нөктәләр шуны аңлатып тора. Ә бит өс нөктәләрҙә, күҙгә күренмәгән фәрештәләрҙәй, тәрән фекерҙәр йәшеренә. Уларҙың барыһын да яҙһаң, 30 битлек әҫәрең 150 битлек булыуы мөмкин. Ике сәғәт дауам иткән сәхнә әҫәрендә тыныш билдәләре лә алтынға әйләнә. Халыҡ та шулай һөйләшә бит. Фекерен йә бөтөнләй йәшерә, йә әйтеп бөтөрмәй. «Тел төбөңдө аңламаныҡ», тип әйтеү — шуның хәсиәте. Сәхнәлә ул әҫәр ҡаһармандарының хәрәкәте (кәүҙә тотошо, атлап китеү, ҡул болғау, күҙ уйнатыу, уҫал йылмайыу, матур йылмайыу һ.б.) менән бәйле. Ә инде мәғәнәне тыныш билдәләре менән тәрәнәйтеү классик әҙәбиәттә лә бар. «Он — пришел», ти бер әҫәрендә М.Горький. Грамматик яҡтан ҡарағанда, бында һыҙыҡ ҡуйыу дөрөҫ түгел. Ә ҡуйған бит бөйөк яҙыусы. Һыҙыҡ бында оҙаҡ һағынып көтөү, инде осрашыу бәхете, йылмайыу, шатланыу кеүек хис-тойғоларҙы белдерә, һыҙыҡ ҡуйыуҙың хикмәтен, ысын аҫылын әҫәрҙе уҡып сыҡмайынса аңлап булмай. Драматургтың тыныш билдәләрен аңлатыу өсөн ҙур диҡҡәтлек кәрәк. Пьесаларын уҡығанда ла, ҡарағанда ла аңлашыла улар. Сөнки, әйтелгәнсә, хәҙерге халыҡтың эстетик һиҙемләүе көслө. М.Горький әйткәнсә, тамашасы — иң көслө тәнҡитсе. Уның шулай икәнлеген хәҙер ныҡ аңланыҡ. Спектаклдең тамамланыуын һиҙһә, тамашасы сығып китеү яғын ҡарай. Күптән түгел «Нур» театрында Ғәйетбайҙың «Һинән — фатир, минән — ир» комедияһын ҡараныҡ. Зал шығырым тулы ине. Бына спектакль тамам. Сәхнәлә — уйнаусылар. Залда — тамашасылар. Сығып китеү тураһында берәү ҙә уйламай. Барыһы ла баҫты. Көслө алҡыштар. Йәштәрҙең шатлыҡлы тантаналары аҡҡоштар туйындағылай моңло сырылдауҙар менән белдерелә. Ғәйетбай сәхнәгә саҡырылғас, көмөш тауыштар тулҡыны йәнә көсәйеп, сәхнә йөрәге менән тамашасылар йөрәге сәнғәти хис-тойғолар мөхәббәте ялҡынында ҡауышты. Ғәйетбайҙың башҡа сәхнә әҫәрҙәрен ҡарағанда ла шундай уҡ мөҡәддәс илаһилыҡ күреп шатланғаным бар. Драматург-педагог, драматург-психолог, драматург-философ, драматург-новатор булыуҙың аҫыл рухиәтелер был.

Бындай фекерҙе Наил Ғәйетбайҙың бер сәхнә әҫәрен генә лә ҡарап әйтеп була. Филологик анализдың мәғәнәһе әҫәрҙең тел, стиль үҙенсәлеге менән бәйле. Сәнғәти оҫталыҡ шул нигеҙҙә асыҡлана. Драматургтың барлыҡ әҫәрҙәре буйынса ҡалын монографик хеҙмәт яҙырға мөмкин булыр ине. Ҡыҫмә мәғәнәлә әйтһәк, был диңгеҙҙән бер тамсы һыу алып күрһәтеү һымаҡ ҡына...